**Эштәрегеҙҙе geroi1812@mail.ru почтаһына ебәреүегеҙ һорала! Эшегеҙҙә етәксегеҙ тураһында мәғлүмәт бирергә онотмағыҙ**

*Тәкдим ителгән текстарҙың береһен һайлағыҙ. Текстың проблемаһын билдәләгеҙ. Күтәрелгән проблема буйынса эссе яҙығыҙ. Үҙ тезисығыҙҙы һәм фекерҙәрегеҙҙе раçлау-дәлиләү өсөн ике миçал килтерегеҙ (уҡылған текстан дәлиләп йәки тормош тәжрибәгеҙҙән.) Эссеның күләме 200 – 250 һүҙ.*

**Текст 1. *Ҡаһымдың үләме***

Ҡолтүбә тиҙ генә Семенов, Ҡаһым һәм Фольгнер алдына тулы бокалдар килтерә.
***Семенов.*** Дуçлыҡ өсөн!
***Ҡаһым***. Мәңге дуçлыҡ өсөн!
***Фольгнер.*** Сәләмәтлеккә!
Эсәләр.
***Семенов.*** Рәхмәт, дуçтар, миңә ваҡыт.
Барыһы менән тип әйтерлек күрешеп сыға.
***Байыҡ.*** До свиданья.
***Ядкәр.*** О ревуар!
***Семенов****(көлөп).*О ревуар, мон шер!
***Ҡаһым.*** Ха-ха-ха... Был беҙҙең француз инде, теге ваҡыт флаг алған егет.
***Семенов.*** Әһә, молодец егет! Наградаң менән ҡотлайым.
Ҡулын ҡыçа. Сыға башлай. Ҡаһым ҡапыл йөрәген тота.
***Ҡаһым.*** Аһ!..
***Семенов.*** Нимә булды һеҙгә, полковник?!
***Ҡаһым.*** Былай ғына, буғай...Лекарь!
***Семенов***. Тукта, тукта, йөҙөң ағара...
***Ҡаһым.*** Ах, лекарь тиҙерәк киләме?
Хәлгенәйем бөтөп бара,
Ыcҡындырығыҙ көмөш төймәмде...
Барыһы ла уға ташланалар, түшен ысҡындыралар, лекарь йүгереп инә.
***Сафия.*** Ҡаһым, йәнем!
***Ҡаһым.*** Ағыу...ағыу...(Ҡолай.)
***Семенов.*** Кем эше был?
Ҡаһымды иплән һалалар.
***Аçылбикә.*** Бынау ҡара йылан!*(Ҡолтүбәне тотоп ала.)*
***Ҡолтүбә.*** Алдай, ышанмағыҙ бисә һүҙенә!
***Аçылбикә***. Ә был ҡағыҙ нимә?
***Аҡйегет.*** Хәҙер алҡымыңды сәйнәп өҙәм, яуыз! Ниңә ағыу бирҙең түрәгә?
***Ҡаһым*** *( аңына килеп).*Ҡуй, Аҡйегет, килсе минең эргәмә...
Сафия һәм башҡалар илай. Ҡолтүбәнең ҡулын ҡайырып артҡа бәйләп, эргәһенә ике һалдат баçа.
Сафия, Сафия...күк түшле күгәрсен,
Өҙгөләнмә, түкмә йәшеңде!
Илем алыр үсен минең өсөн...
Килсе, бер һыйпайым сәсеңде.
Сәсенән һыйпай.
***Аҡйегет.*** Был һатлыҡты нимә эшләтәбеҙ, генерал?
***Семенов.*** Эт шикелле атырға!
***Ҡолтүбә***. Аһ, кисерегеҙ! Мин...мин...*(Теҙләнә.)* Майор Фольгнер ҡушҡанды ғына үтәнем.

***Фольгнер.*** Алдай башҡорт, швайен!

***Семенов***.А-һа, йәле, майор, күҙемә тура ҡара!*( Ныҡ текләй.)*

***Фольгнер***. Юҡ, юҡ...

***Семенов.*** Их, мундирлы кәнтәй! Күҙҙәрең үк алдап торалар. Атырға!

Ҡолтүбә менән Фольгнерҙы алып сығып китәләр. Тәүгеһе өҙлөкһөҙ илай, икенсеһе таш кеүек ҡатып ҡалған.

***Ҡаһым.*** Уҙамандар, үләм... Хуш, генерал!

***Семенов***.Аһ, ниндәйен кеше әрәм була!..

***Сафия.***Ағыу...ағыу! Юҡмы ни һуң дарыу?

***Ҡаһым.*** Туғандарым, урыҫ менән беҙҙең дуҫлыҡты боҙор өсөн ағыу йөрөтөүселәр киләсәктә лә күп булыр әле ул. Юҡ, юҡ, ундай мәкерҙәргә бирелмәгеҙ, аң булығыҙ!..

***Барыһы.*** Ҡаһым түрә менгән һор юрғаҡай, вай кем
Түбән эйеп тора башҡайын,
Ун алты ла йәшлек Сафия һылыу, вай кем,
Түгер инде ҡайнар йәштәрен...

Шаршау.

*(Б. Бикбай, «Ҡаһым түрә»)*

### *Текст 2. Һуғышҡа китер алдынан уйланыуҙар*

*Ир-егеттәрен һуғышҡа оҙатырға йыйналыусы кешеләрҙә генә ҡышҡа әҙерләнеү хәстәрлеге юҡ. Япа-яңғыҙ ҡаласаҡ бисә-сәсә, бала-саға, ҡарт-ҡоро ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә аслы-туҡлы нисек йәшәр инде? Кантондар төҙөлгәндән бирле, мал үрсетергә мөмкинлек ҡалмағас, ни хәл итерҙәр улар? Быйыл, исмаһам, игене лә уңманы бит!..*

*Бындай ауыр, үтә ҡатмарлы шарттарҙа һуғышҡа китәсәк кешеләрҙе аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүе, ҡоралландырыуы һәм атһыҙҙарға аттар табып биреүе ҡыйын буласағын Ҡаһым яҡшы аңлай. Ләкин ундай яуаплы бурыс уңышлы башҡарыласағына ул ышана. Башҡорттар, батша һәм байҙар тарафынан нисек кенә ҡыйырһытылыуҙарына һәм кәмһетелеүҙәренә ҡарамаҫтан, Рәсәй именлеген дошмандан һаҡлау өсөн барлыҡ мөмкинселектәрҙе файҙаланасаҡтар. Тик бер батша ғына, башҡорттарҙың эскерһеҙ тоғрологона икеләнеп, полктар ойоштороуға һәм башҡорттарҙы ҡоралландырыуға ҡаршы булған, тиҙәр. Шулай ҙа, башҡорт казак полктарын ойоштороу тураһындағы ҡағыҙға ҡул ҡуйып, үҙенең махсус манифесында, Рәсәй ере дошмандан азат ителгәс тә, башҡорт халҡына ирек һәм бәхетле тормош бирәсәген белдергән. Ләкин батша үҙ һүҙендә торормо-юҡмы? Әгәр ҙә алдашһа, халыҡ тормошон еңеләйтеү сараһын күрмәһә, ни эшләргә кәрәклеген Ҡаһым хәҙер яҡшы белә. Хәрби академияла уҡыу, Петербургтағы иң алдынғы, һәр яҡлап белемле, аҡыллы дворян егеттәре менән уның көн дә аралашыуы бушҡа китмәне. Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев яуы рухы башҡорт халҡында әле һаман йәшәй. Наполеон ғәскәрен еңгәндән һуң да хәлдәре еңеләймәһә, улар батшаға һәм уның ялсыларына ҡаршы яңы яу ҡубарасаҡтар. Крепостнойлыҡ ҡоллоғонда интегеүсе рус крәҫтиәндәре менән башҡорттарҙың яҙмышы уртаҡ. Улар, Емельян Пугачев яуындағы шикелле, ҡулға-ҡул тотошоп берҙәм күтәрелһәләр, һәр саҡ еңеүсе буласаҡтар. Халыҡтың ауыр көнкүрешен еңеләйтеү тураһында хыялланыусы Петербургтағы иң белемле дворян егеттәре үҙ-ара кәңәшләшкәндә һөйләшкән һүҙҙәрҙе бик йыш ишетергә тура килде Ҡаһымға. Уларҙың уй-тойғоларын хуплай һәм уларға Ҡаһым теләктәш... Волконский Сергейҙың аҡыллы, зирәк һәм һәләтле иптәштәре менән яҡындан танышыу уны күп нәмәгә өйрәтте. Шундай кешеләр менән аралашыуы, дуҫлашыуы һәм бергә йәшәүе өсөн ҡыуана Ҡаһым...*

*(Я. Хамматов, «Төньяҡ амурҙары»)*

## *Текст 3. Француз бәйете*

*Көн буйынса көрәш барҙы ҙур акланда,*
*Иген-сиген күрә алмаҫһың, нык бакһаң да.*
*Кеше менән хайуан каны аралашты,*
*Ер һеңдереп өлгөрә алмай, өҫтән ташты.*
*Ярһыу ирҙәр куркыу күҙен күрмәнеләр,*
*Аяк-кулдың өҙөлгәнен белмәнеләр.*
*Йә, илаһи, карап тороп ни эшләйһең,*
*Затлы халкың кырыла бит, ник белмәйһең?*
*Мыкты ирҙәр канһырашып ауып бөттө,*
*Каты елдәр кан еҫтәрен алып китте.*
*Ике яклап йыһан иңләп гәскәр килә,*
*Бәрелешәләр, төкөшәләр маңлай илә.*
*Белер хәл юк еңеүселәр бармы икән,*
*Вәхшилектәр кылмаһалар, ер тармы икән?*
*Мөртәд [1] француз ер талауга ылыккандыр,*
*Беҙҙең дуҫтар әсирлеккә юлыккандыр.*
*Керһеҙ йәндәр нәүхә [2] кылып, һыкранып,*
*Дау куптарган кара эстәрҙе каргагандыр.*
*Гонаһ кылган катилдәргә [3] форсат юктыр,*
*Йырткыстарга ут һибәбеҙ, беҙ-газраилдыр.*
*Ук етмәҫлек мөхрибтәргә [4] юк котолоу,*
*Кылыс илә үҙ канына тонсокторо̄у.*
*Ыласын ирҙәр хас дошмандарҙы онотмаҫтар,*
*Һеперреп түкмәй изге ерҙән вә кайтмаҫтар,*
*Калгаларен вата-емерә өңөнә етеп,*
*Французларҙы пәймәнлеккә [5] сәбәп иттек.*

*(Башкорт халык ижадынан)*

[1] **Мөртәд(г.)**- *үҙ диненән яҙган, башка дингә күскән.*
[2] **Нәүхә(г.)**-*акырып илау.*
[3] **Катил (г.)**- *үлтереүсе.*
[4] **Мөхриб(г.)**- *зарар килтереүсе, һәләк итеүсе.*
[5] **Пәймәнлек(г.)**- *килешеү.*